

# КИНЙӘ УЛЫ ҺЕЛӘҮҺЕН

Халҡыбыҙ тарихында тәрән эҙ ҡалдырған бөйөк шәхестәребеҙҙең береһе — Кинйә Арыҫланов. Ул 1773—1775 йылдарҙағы крәҫтиәндәр һуғышында Е.И. Пугачевтың иң яҡын кәңәшсеһе, тоғро көрәштәше булған. Кинйә батырҙың яҡты образы романдарҙа, телефильмдарҙа, тарихи хеҙмәттәрҙә киң сағылыш тапҡан. Һуңғы йылдарҙа тарихсы Салауат Таймасов Пугачев яуында әүҙем ҡатнашҡан 86 башҡорт полковнигының һәм башҡа юғары дәрәжәле хәрби етәкселәрҙең исемлеген асыҡланы. Шуларҙың береһе — Кинйә Арыҫлановтың улы Һеләүһен Кинзин.

Һеләүһен Кинзин Нуғай даруғаһы Бошман-Ҡыпсаҡ волосының (хәҙерге Көйөргәҙе районы) Кинйә ауылында тыуған. Ғәли Ибраһимов та, Салауат Таймасов та Һеләүһен 1745 йылда тыуған, тип иҫәпләй. Үлгән йылы — 1811 йылдан алдараҡ. Һеләүһен Ҡарғалы мәҙрәсәһендә уҡыған. Пугачевҡа 1773 йылдың октябрендә Ырымбурҙан 18 саҡырымда урынлашҡан Ҡарғалы биҫтәһендә ҡушыла. Һеләүһенден 1773—1774 йылдың ҡышҡы айҙарындағы хәрби эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Ул, моғайын, ошо осорҙа төп ставкала булып, 6 айға һуҙылған Ырымбурҙы ҡамау операцияһында ҡатнашҡандыр. Уны төрлө хәрби заданиелар менән халыҡ араһына ебәргәндәр. Мәҫәлән, 1774 йылдың мартында Нуғайбәк һәм Баҡалы ҡәлғәләре эргәһендә карателдәр менән һуғыштарҙа ҡатнашҡан. Май айында инде Ырымбур тирәләрендә хәрәкәт итә. 25 майҙа Ташлы ауылы янында полковник С.Н. Наумовҡа ҡаршы һуғыша. Был алышта баш күтәреүселәр еңеп сыға.

Июнь башында полковник Һеләүһен Өршәк йылғаһы буйында хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы көрәшә. Июлдә Ҡаранай Моратов, Ҡәнзәфәр Усаев һәм башҡалар менән бергәләп Бөгөлмә — Ырымбур трактында хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыша. Карателдәргә «тоғро» ҡалған старшиналар Ҡыҙрас Муллаҡаев, Мендей Төпәев ярҙам итә. Хыянатсыларҙы әҙәрләп, Ҡәнзәфәр Усаев төп ғәскәрҙән айырыла. 4 августа Ҡәнзәфәр Усаев ҡулға алына. Уны Ҡазанға Йәшерен комиссияға оҙаталар. Ихтилалсылар еңелә. Ноябрь айында Һеләүһен Кинзин «тоғро» старшина Әлибай Мырҙағоловҡа, Ҡазанға Йәшерен комиссияға барам тип, подписка бирә.

23 декабрҙә Һеләүһен Мәскәүгә Сенаттың Йәшерен экспедицияһына оҙатыла. Уны Мәскәүҙә атаһы Кинйә Арыҫлановтың үҙ ирке менән властарға баш һалыуын тәьмин итеү өсөн заложик итеп тоталар.

1775 йылдың 17 мартында аяҡтары бығаулы Һеләүһенде Юлай һәм Салауат менән кире Башҡортостанға оҙаталар. Йәшерен экспедиция Ырымбур губернаторы И.А. Рейнсдорпҡа: «Мәскәүгә Һеләүһенден тикшереү материалдары килмәне, уның эшмәкәрлеген үҙегеҙ тикшерегеҙ», тигән күрһәтмә ебәрә. Юлай, Салауат һәм Һеләүһен 1775 йылдың 9 апрелендә Ырымбурға килтерелә. 1775 йылдың 23

апрелендә И.А. Рейнсдорп Сенаттың обер-прокуроры А.А. Вяземскийға тоғро старшиналар Яманһар Яппаров, Биктимер Мотаев, Муса Иманғолов һәм сотник Яманғол Уңғаровтар аша Һеләүһендең ғәйепһеҙ булыуы асыҡланды. Мин уны ҡабат тоғролоҡҡа ант иттерҙем һәм подписка алып, өйөнә ҡайтарып ебәрҙем», — тип хәбәр итә. «Что касается до отца ево Кинзи, — тип яҙа губернатор, — то сии старшины уверили, что он, бежав с злодеем, безвестно пропал».

Һүҙҙең аҙағында Һеләүһен Кинзиндың нәҫел ебен килтерәйек:

Кинйә
(1723—1774)
|
Һеләүһен
(1745—1811 й. тирәһе)
|
Ҡотлоәхмәт
(йәшәгән йылдары билдәһеҙ. Мерәскә Ашҡаҙар яғынан килеп ултырған)
|
Фазлыйәхмәт
(билдәһеҙ, Мерәс янында Ибраһим ауылын, бәлки, ул нигеҙләгәндер)
|
Исмәғил
(билдәһеҙ)

Ғайса (1872—1912)
- Зәйнәпямал (1904—1997)
- Мөхәмәтйән (1895—1967)
  - Зөбәйҙә (1929 й. тыуған)

Мырҙағол
- Ташбулат (1912—1998)

*Рауил БИКБАЕВ,*
*тарих фәндәре кандидаты.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

«Ватандаш» ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм художество журналының мәҙәниәт һәм сәнғәт бүлеге мөхәррире **Алтынбаева Зөһрә Нариман ҡыҙына** «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң информация хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем бирелде.

Республика суверенитетының 10 һәм Бөйөк Еңеүҙең 55 йыллығына ҡарата Мәҙәниәт министрлығы иң яҡшы драма әҫәренә иғлан иткән конкурста журналдың әҙәбиәт һәм фольклор бүлеге мөхәррире, билдәле яҙыусы һәм драматург, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Ғарипова Таңсулпан Хизбулла ҡыҙы** «Бәхеткә ҡаҫҡандар» фантасмагорияһы өсөн беренсе премияға лайыҡ булды.

Ошо айҡанлы «Ватандаш» журналы коллективы уларҙы ҡайнар ҡотлай һәм артабанғы ижадтарында яңынан-яңы үрҙәр теләй!